*Марс ЮЛДАШЕВ,*
*профессор*

# Ҡоролтай хәрәкәте һәм милләт сәләмәтлеге

***Беренсе Бөтә донъя башкорттары королтайын уҙғарыуға ла ун йыл үтеп киткән! Эй, ғүмер, ғүмер... Әле яңы ғына үҙгәрештәр дәүере, "перестройка" башланған кеүек ине. Бына, ниһайәт, "демократия", "гласность" дәүере килеп етте, тип кыуанып йөрөй инек. Коллегам, мәшһүр хирург, медицина фәндәре докторы, профессор Рәхмәтуллин Ибраһим Ғәйзулла улы миңә бер көн былай тине: "Марс Тимербулатович, Аллаға шөкөр, беҙҙең көн килеп етте бит. Хәҙер демократия, гласность, үҙ фекеребеҙҙе асыктан-асык әйтеп бирә алабыҙ, үҙ милләтебеҙ өсөн асыктан-асык көрәшә алабыҙ бит. Әйҙә, иртәгә сәғәт алтыға Булат Рафиков янына барабыҙ. Унда, "Ағиҙел" журналы редакцияһында, беҙҙең арҙаклы башкорттарыбыҙ йыйыла". Шулай итеп, беҙ, медицина өлкәһендә эшләгән, халкыбыҙҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге тип йәшәгән башкорттар, редакцияға барҙык. Халкыбыҙ өсөн көрәшеп йөрөгән арҙаклы шәхестәр барлығын күрҙек: Булат Рафиков, Рәшит Шәкүр, Дамир Вәлиев, Ирек Акманов, башка күп кенә зыялылар менән осрашып, һөйләшеп, алға пландар корҙок.***

1994 йылдың 19 мартында беҙ Дәүләкән ҡалаһында мең ырыуы башҡорттары ҡорона йыйылдыҡ. Бындай ҡор беренсе тапҡыр ойошторолғайны, әммә шул тиклем күтәренке күңел менән, ысын йөрәктән башҡорт халҡын уятыу, тергеҙеү ниәте менән йыйылды халыҡ. Ошо ҡорҙа бик күп мәсьәләләр күтәрелде, халыҡҡа ялҡынлы һүҙҙәр, мөрәжәғәттәр әйтелде. Мостай Кәрим, Булат Рафиҡов, Гөлфиә Юнысова, Факиһа Туғыҙбаева, Рәшит Шәкүр, Розалиә Солтангәрәева һәм башҡа күренекле яҙыусылар сығыш яһаны. Мин халҡыбыҙҙың һаулығын һаҡлау проблемаларын күтәреп сыҡтым. Халҡыбыҙҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында һүҙ алып барылды. Ҡоролтай Советы төҙөлдө, мине лә һайлап ҡуйҙылар. Ҡоролтайҙа төпкөл ауылдарҙан килгән халыҡ тормошто яҡшыртыу, мәҙәниәтте үҫтереү, телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу мәсьәләләрен күтәрҙе. Һуңынан йыр-моңдар, ҡурай яңғыраны, халыҡ оҙаҡ таралмай торҙо — күрәһең дә, тормошобоҙҙа өр-яңы дәүер башланды.

Ошо йыйындарҙың күбеһе беҙҙең Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын йыйыу идеяһын хупланы. Лидерҙар Булат Рафиҡов, Рәшит Шәкүр, Ирек Аҡманов һәм беҙҙең кеүек улар менән йыш ҡына йыйылышып, бәхәсләшеп, пландар ҡороп йөрөүселәр ҙә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын уҙғарыу тураһында фекер әйтте. Баштараҡ, ҡайһы берәүҙәрҙең фекере буйынса, тик Башҡортостан башҡорттарын ғына йыйырға һәм рәсми булмаған рәүештә уҙғарырға ине. Шунан һуң, бәхәсләшә торғас, дәүләт кимәлендә уҙғарырға тигән ҡарарға килдек һәм М.Ғ.Рәхи-

мовҡа мөрәжәғәт тапшырҙыҡ. Ә Президент идеяны хупланы һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын уҙғарыу тураһында Указ сығарҙы. Ҡоролтайҙы ойоштороу бик ябай мәсьәлә түгел инде, бигерәк тә тәүге тапҡыр. Халҡыбыҙҙы борсоған иң мөһим мәсьәләләрҙе уртаға һалып тикшерер өсөн ун секция ойоштороу кәрәк тип табылды: телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү, башҡорт теленә дәүләт теле статусын биреү, Башҡортостан суверенитетын нығытыу, башҡорт ҡатын-ҡыҙы, ғаилә һәм балалыҡ, башҡорт халҡының һаулығы, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, йәштәр проблемалары, башҡа бик күп мәсьәләләр буйынса. Профессор Ибраһим Рәхмәтуллин тирә-яҡ мөхит, һаулыҡ һәм башҡорт генофондын һаҡлау секцияһын етәкләне һәм сығыш яһарға тәғәйенләнде, ә мин "Башҡортостан Республикаһында балалар һаулығының торошо" доклады менән сығыш яһарға әҙерләндем.

Ниһайәт, беҙҙең күптәнге пландар, өмөттәр тормошҡа ашты—1995 йылдың 1 июнендә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы тантаналы рәүештә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында асылды. Мин Стәрлебаш районынан делегат итеп һайландым. Делегаттар араһында күренекле шәхестәр һәм ҡоролтайҙы ойоштороу өсөн күп йөрөгән кешеләр менән бергә, ҡоролтайҙы ниндәй көстәр ойоштороғанын, уның маҡсаты тураһында бер ни ҙә белмәгән, байрам итер өсөн генә килгән кешеләр ҙә күп ине. Әммә ойоштороусылар өсөн был ҙур ҡаҙаныш та, ҙур еңеү ҙә булды.

Башҡортостан Республикаһы Президенты М.Ғ.Рәхимов үҙенең Указы менән 2005 йылды Башҡортостан Республикаһында "Наркоманияны, алкоголизмды һәм тәмәке тартыуҙы иҫкәртеү йылы" тип иғлан итте. Президенттың был Указы ҙур әһәмиәткә эйә, сөнки күрһәтелгән проблемалар республикабыҙҙа, бөтә Рәсәй Федерацияһындағы кеүек үк, көнүҙәк мәсьәлә булып китте. Ошо Указды тормошҡа ашырыуҙы Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм уның Экология, һаулыҡ, әсәлек һәм балалыҡ буйынса комиссияһы үҙенең изге бурысы тип иҫәпләй.

Республикабыҙҙа наркомания, эскелек кеүек яман күренештәр киң таралып китте. Алкоголизм хәҙер хатта ҡатын-ҡыҙҙарҙа, балалар һәм үҫмерҙәр араһында ла йыш осрай. Тәмәке тартыу инде ғәҙәти күренешкә әйләнде. Был афәттәр башҡорт халҡына хас түгел, уны беҙгә иҡтисади-социаль торғонлоҡ алып килде. Наркомания, эскелек һөҙөмтәһендә енәйәтселек күбәйҙе, әммә уның да нигеҙендә иҡтисади-социаль сәбәптәр ята. Эскелек менән көрәшеүҙән алда фәҡирлек менән көрәшә башлау мөһим.

Президент Указын тормошҡа ашырыу буйынса хөкүмәт кимәлендә ойоштороу комитеты раҫланған һәм пландар төҙөлгән. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ла ҙур бурыстар билдәләгән. Әммә бөтә пландарҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн йәмғиәткә, халыҡҡа таянып эш итергә кәрәктер. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ошондай ойошма. Уның һәр бер ҡалала һәм район үҙәктәрендә урындағы ойошмалары бар. Был проблемалар тик башҡорт халҡына ғына ҡағылмай. Республикала төрлө халыҡтарҙың милли-мәҙәни берекмәләре бар. Улар ҙа дөйөм эшкә ҡушылырға, ҡыҫҡаһы, Башҡортостандағы бөтә халыҡ берҙәм булып күрһәтелгән проблемаларҙы хәл итергә тейеш. Наркомания, эскелек афәтенең төп сәбәбе — халыҡтың ауыр матди хәле, эшһеҙлек, шуға күрә лә был хәүефкә ҡаршы тороу — барлыҡ йәмғиәтебеҙ эше.